# Күңелдәрҙе беҙҙең кем сафландырыр? Кем үҙгәртер беҙҙең фекерҙе?

*Нимә икән ул әҙәбиәт? Уны кешенең эске донъяһын, рухиәтен өйрәнеүсе фән, тип атаусылар ҙа бар. Бынау хәтлем барыһын да техника башҡарған заманда, замандаштар китаптан, матбуғаттан баш борған осорҙа тотош йылды Әҙәбиәткә бағышлап, әҙәп, рухыбыҙ, һүҙ сәнғәте хаҡында ла һөйләштек, буғай. Әммә йыл тамамланыу менән генә бәндәләрҙең, саф шишмә һыуына сарсағандай, яҡтылыҡҡа ынтылышы, изгелеккә табыныуы, шулар хаҡында һүрәтләгән сәнғәт әҫәрҙәре менән даими танышып тороу теләге ташламай. Ер әйләнә икән, беҙ матурлыҡ, яҡшылыҡ хаҡында һөйләрҙән туҡтарға тейеш түгелбеҙ. Ошолар хаҡында билдәле шағирә, тос фекерле авторыбыҙ Тамара ҒӘНИЕВА менән әңгәмәләшәбеҙ.*

**— Шағирҙар — Аллаһ илселәре, тигән фекерҙе уҡыным бер көн. Был ҡараш һеҙҙә ниндәй уйҙар уята? Ул шағирҙарҙың ерҙәге юғары миссияһын аңлатамы, әллә был тәкәбберлек сифатымы? Кем йөкмәткән уларға был бурысты?**

— Кем әйткән һуң ул уны улай тип? Авторы юҡмы ни ул һүҙҙең? Интернетта хәҙер әллә нәмәләр яҙырҙар ул. Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең бер туған ҡустыһы шағир булған. Ғөмүмән, Ҡөрьән Кәрим ғәрәп иленә төшөрөлөрҙән алда ғәрәптәрҙә шағирлыҡ көслө була. Шул уҡ ваҡытта кәнизәктәр ҙә күп була. Ошо осорҙа Ҡөрьән Кәрим пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдең шағирҙарға мөнәсәбәтен ни өсөндөр бигүк ыңғай итеп күрһәтмәй. Бер туған ҡустыһына ла ул кире мөнәсәбәттә була.

Халыҡ телендә “шағирҙар — Аллаһ Тәғәләнең илсеһе” тигән һүҙ йәшәй икән, уны шағирҙар үҙҙәре уйлап сығарғандыр ул. Һәммә кеше кеүек үк, беҙ ер өҫтөнә үҙ миссиябыҙҙы үтәргә килгәнбеҙ. Ул һауынсымы, игенсеме, тимерсеме, яҙыусымы — барлыҡ һөнәр эйәләре үҙ тәғәйенләнеше менән яратылған. Йырсыны тыумыштан уҡ моң биреп ярата бит инде Күктәр. Шағирҙар ҙа, әлбиттә, бүтәндәрҙән айырмалы, донъяның асылын аңларға тырышыу һәләте менән тыуҙырыла. Күк һәм Ерҙең, кеше менән кеше араһындағы мөнәсәбәттәрҙе аңларға тырышыу был. Әйтәйек, ни өсөн шағирҙарҙың байтаҡ шиғыры уйҙар, ниндәйҙер абстракт образдар аша халыҡҡа еткерелә? Кешегә һөйләп әйтергә теләгән фекерҙе телдән дә, һөйләшеү ысулы менән дә

әйтеп була, тик шағирҙар ғына бөтә кешеләр ҙә аңлап етә алмаған образдар аша донъяның камиллығы һәм камилһыҙлығы хаҡында һөйләй. Ниндәйҙер кеше идеалында йәшәгән камиллыҡҡа өлгәшеүгә әйҙәгән кеүек ижад итә ул. Ҡабатлап әйтәм: кешегә фекерендә "мин һине яратам!" тип кенә лә аңлатып була. Ләкин бит шағир бер ваҡытта ла улай тип шиғыр яҙырға тейеш түгел. "Яратам" һүҙен әйтмәй генә лә хистәрендә белдерергә була, тип элегерәк тә яҙғаным булды һәм тағы ла шуны иҫкә алам. Образдар менән эш итеү кешенең фекерен һәм күңелен сарлай. Фекерҙе, күңелде камиллаштыра. Шағир ергә һәләт менән тыуҙырылғас, тимәк, уның бурысы — сәнғәт әҫәре тыуҙырыу. Һәләт бирелгән бит, эшлә, ижад ит!

**— Һәләтһеҙ шағир буламы?**

— Һәләтһеҙ шағирҙар ҙа бар. Улар үҙ теләге менән шағир булырға теләй. Улай ҙа мөмкин, ләкин һәләт менән тыуҙырылғандары үҙ теләге менән милләтенең, туған теленең мөмкинлектәре аша, халҡының рухи донъяһының кимәлен аңлаған өсөн, нәҡ уның асылына тиң, шул кимәлдәге образдар, хистойғолар аша зиһен шәрифтәрен еткерергә тырыша. Шиғриәт бер ниндәй ҙә мәғлүмәт бирә торған мөхит түгел, унда белгәндәреңде рифмалап сығыуҙың, гәзиттә йә тарих китабында уҡығандарҙы рифмалап халыҡҡа аңлатыуҙың кәрәге юҡ. Улар инде тарих китаптарында сыҡҡан, гәзиттә публицистик мәҡәлә булып баҫылған. Уны былай ҙа уҡып, былай ҙа зиһенгә һеңдереп була. Ә шағирҙың бурысы нәҡ күңел даирәһенә ҡағылырға тейеш. Телдең мөмкинлектәренә тәрәнерәк иғтибар иттереү өсөн кешенең һәм кешегә генә хас кисерештәрҙе һүрәтләй.

**— Шағир кәрәкме ул кешеләргә?**

— Ҡәрәкмәй, тип әйтергә лә мөмкин, сөнки ул ниндәйҙер донъяны үҙгәртеүсе түгел бит. Бына ул даһи, тип әйтәләр бит әле. Генийҙар донъяны үҙгәртеп ебәрә.

**— Шағир үҙгәртә алмаймы ни? Ул бит йөрәккә, зиһенгә тәьҫир итә хатта?**

— Сөнки ул донъяны үҙгәртер өсөн ниндәйҙер асыш яһарға тейеш. Ә асыш яһар өсөн ғилми даирәләргә инеп китеү мөһим, ә инде ул ғалимдар эше, ә шағирҙыҡы түгел. Бына мин примитив рәүештә шағирҙың миссияһын шулай аңлайым. Әйтәйек, шулай ҙа берәй шағирҙы гений тип әйткебеҙ килә икән, уның әҫәре тотош кешелектең рухи донъяһын, зиһенен тетрәндерерлек булырға тейеш. Гётеның "Фауст" әҫәре, мәҫәлән. Йә булмаһа, Лев Толстойҙың "Һуғыш һәм солох" романы.

**— Бабичтың "Ғазазил"ы!**

— Эйе. Хатта ки XXI быуаттың "ҡатын-ҡыҙ романы" тип аталған әҫәрҙәрендәге коллизиялар, кеше мөнәсәбәттәре, рыцарлыҡ, тоғролоҡ һәм мөхәббәткә булған инаныулы ҡараш — былар кешеләрҙең күңелен һәм зиһенен үҙгәртеп ебәрә торған образдар.

**— Шулай булғас, был бит юғарыраҡ миссия. Матди донъяны үҙгәртеүе тиҙ, аҡсаң ғына булһын, ә бына кешеләрҙең күңеленә тәьҫир итеү...**

— Асылда кеше күңеленең үҙгәреп китеше юҡтан түгел. Тимәк, бәндәләрҙең потенциалы ҙур. Аллаһ Тәғәлә биргән эске мөмкинлектәрҙе аса ғына белергә кәрәк, сөнки шул уҡ шағирҙар ҙа әҙәм балаһы ғына бит инде.

Ҡешеләргә ҡарата мөхәббәте арҡаһында шағирҙар ҙа шағир булырға теләй. Йә булмаһа, күбеһенсә үҙе тураһында яҙғанда ла һәр ваҡыт күршеһенең дә, ауылындағыларҙың да, милләте вәкилдәрен дә — һәммә милләттәштәренең дә холҡон ҡабул итә алыу мөмкинлектәрен белгәне өсөн яҙа. Миңә үҙемә ҡарата әйткәндәре лә бар: нисек итеп шундай бөтәбеҙгә лә таныш һүҙҙәр менән иҫ киткес әҫәрҙәр яҙаһың ул, тип. Ә бит ул һүҙҙәрҙе мин уйлап тапмағанмын — улар халҡыбыҙ хазинаһы, изге мираҫ. Мин шул һүҙҙәрҙе халыҡҡа уның мәғәнә бирә торған мөмкинлектәрен күрһәтер өсөн ҡулланам.

Ҡайһы бер һүҙҙәр ябай телмәрҙә ҡулланылмай, кешеләр ябай һөйләшә, мөнәсәбәттәрен ябай итеп аңлата. Ләкин шундай осраҡтар була, кеше менән кеше араһында аңлашылмаусанлыҡ килеп тыуа. Нимә өсөн донъялар һуғышҡа тиклем барып төртөлә, йә булмаһа өй эсендәге кешеләр айырылышыуға, йә күрше менән күрше дошман хәленә тиклем барып етә, туған менән туған бер-береһен аңламай? Сөнки беҙ һөйләшә белмәйбеҙ. Һөйләгәнде ишетмәйбеҙ. Үҙебеҙҙең инаныстарыбыҙҙы башҡаларға һеңдерергә тырышабыҙ, ә уның ни өсөн ҡабул итмәгәнен аңларға теләмәйбеҙ.

**— Өҫтөн-мөҫтөн генә аңлатабыҙ... Бәлки, беҙ йөрәк менән һөйләшмәйбеҙҙер?**

— Эйе, уныһы ла бар, әммә эш йөрәктә генә түгел. Телдең мөмкинлектәрен файҙалана белмәйбеҙ. Урыҫ әйтә бит әле, “безвыходных ситуаций не бывает”, тип. Ана шул килеп тыуған, киҫкенләшкән ситуацияны ыңғай яҡҡа борорға, аңлашырға була ла инде. Ҡысҡырышҡа барып етмәҫкә мөмкин бит ул.

Бына мин — пенсионер. Бер нимә лә эшләгем килмәгәндә телевизор ҡарайым. Элек сериалдарға күҙ ҙә һалмай торғайным. Бер ҡатлы кеүек күренә ине улар миңә. Бына әле ҡарайым да аптырап ҡуям: һөйләшеп аңлашалар ҙа. Бер ир ҙә йоҙроҡ күтәреп ҡайтып инмәй, йә булмаһа бисәһе уҡлау тотоп ҡаршы алып тормай. Эйе, ундайҙары ла бар, әммә “Ни өсөн улай килеп сыҡты?” тигән һорау тыуғанда, һөйләшеп аңлашалар. Тимәк, яп-ябай кеүек күренгән сериалдарҙа ла беҙҙе кешегә ҡарата иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға өйрәтеү ғилләһе бар. Был бик тә, бик тә мөһим мәсьәлә.

**— Халыҡтың мөмкинлектәре, тинегеҙ бит әле. Тарихыбыҙ бай, “Урал батыр”лы халыҡтың шағирҙары бөгөн дә рух усағына ҡуҙ ташыймы?**

— “Урал батыр” эпосы, башҡорт халыҡ ижады, ғөмүмән, уның йыр текстарын ғына алғанда ла, әлбиттә, иҫ киткес юғары кимәлдәге фольклор. Нисәмә быуат халҡыбыҙ шул ижад менән туҡланып йәшәй. Шул уҡ ваҡытта, мин, ярайһы өлкән кеше, шиғриәткә аяҡ баҫҡанда, китап уҡый башлағанда, әҙәбиәттең кимәле, бөгөнгө менән сағыштырғанда, башҡараҡ ине. “Башҡортостан” гәзитенә мин 1965 йылда шиғыр ебәрҙем һәм ул баҫылып сыҡты. Ул ике класташымдың һауынсы булып эшләгәнен маҡтап яҙған шиғыр ине. 8-се класты тамамлағас, педучилищеға киттем. Был ике ҡыҙыҡай, дүрт саҡырым алыҫлыҡтағы фермаға йәйәүләп йөрөп, һыйыр һауҙы. Хәҙер улар икеһе лә мәрхүмә инде, сөнки эштәре ауыр булды, эстеләр. Шул осорҙа шиғриәт икенсе төрлө ине. Ул саҡта ниндәйҙер рифмалары теүәл булған, ниндәйҙер хәҡиҡәтте тәҡрарлаған әҫәрҙәр яҙылған һәм шул шиғриәт тип аталған.

Һәм бөгөнгө шиғриәткә күҙ һал. Хатта интернеттағы һәүәҫкәр ижадсыларҙа ла образлы фекер йөрөтөү ныҡ юғары. Ә инде бөгөнгө шиғриәттең тотҡалары булған шағирҙарға килгәндә, башҡорт шиғриәтенең икенсе кимәлгә күсеү осоро Рәми Ғариповтың исеме менән бәйле. Ул кеше тураһында яҙҙы.

**— Уның күңел торошона мөрәжәғәт итте ижадта!**

— Артабан уның уҡыусылары Рауил Бикбаев, Тимер Йосопов, Сафуан Әлибай, Ҡәҙим Аралбай, шул уҡ Рәми ағайҙың замандашы Рафаил Сафин ағайҙар Мәскәүҙән ниндәйҙер икенсе төрлө тулҡын булып ҡайтып килделәр ҙә, хатта ки Мостай Кәримдең шиғриәте үҙгәреп китте. Мостай ағайҙың 70-се йылдарҙағы лирикаһын уҡыһағыҙ, уның уға тиклем яҙған әҫәрҙәре үтә дөрөҫ һәм бер ниндәй бәйләнгеһеҙ булып сыҡһалар ҙа, 70-се йылдарҙағы лирикаһы, хатта прозаһы яңыса яңғыраш ала. Рауил Бикбаевтар быуыны шул осорҙа беҙҙе — Факиһа Туғыҙбаева, Таңһылыу Ҡарамышева, Рәмзилә Хисаметдинова, Тамара Ғәниеваларҙы — әҙәбиәткә ғашиҡ иткән быуын булды. Быуыны-быуыны менән шиғриәт ниндәйҙер үҫеш кисереп килде. Әле бына һуңғы ваҡытта шиғриәттә ниндәйҙер алданыу һиҙелә. Мин ҡабат-ҡабат әйтеп ҡарайым: “Урал батыр” тиклем эпос, “Саҡ-суҡ” кеүек бәйет, “Сәлимәкәй”, “Зөлхизә”, “Уйыл”, “Урал” кеүек йырҙар ижад иткән халыҡты бөгөн “халҡым” тигән әйҙәүҙәр менән алдаштырырға ярамай. “Халҡым” тигән тойғоно икенсе төрлө һеңдерергә кәрәк. Мәктәптәрҙә, мәҡәләләрҙә, публицистикала, прозала, ә шиғриәттә кешеләрҙең күңелен һәм зиһенен бөтөнләй абстракт образдар менән уйларға өйрәтергә кәрәк. Япондарҙа 3-сө кластан эстетика, сәнғәт дәресе инә башлай. Ни өсөн? Әгәр ҙә шул йәштән баланы быға өйрәтә башлаһаң, унда абстракт фекерләү формаһы барлыҡҡа килә. Тимәк, ул бөтә нәмәне ижади ҡабул итергә өйрәнә. Мәғлүмәтте, ана, телевизор, интернет бирһен, беҙгә нәҡ образлы фекерләргә өйрәтергә кәрәк.

**— Тамара апай тота ла “был минең орбитамдағы шағирә түгел”, тип яҙып ҡуя интернетта. Быны бөтәһе лә һеҙ уйлағанса аңлаймы икән?**

— Һәммә кешенең күңеле талап иткән орбитаһы була. Ғүмер барышында иләктән үткәрелеп, күңелең һәм зиһенеңдең талаптарына күрә елгәрелеп формалаша. Мин, әлбиттә, үҙемдең зауығымды бүтәндәргә тағырға теләмәйем. Ләкин ижадымды шиғриәт тип ҡабул итеүселәр мөрәжәғәт иткәндә, уларға кәңәштәремде бирергә тырышам. Кәңәш — бер хәл, уны ҡабул итеү йәки ҡабул итә алмау — икенсе мәсьәлә. Һәр кемдең ижади офоғо уның һәләт, талант кимәленә бәйле. Кеше нисек кенә тырышмаһын, үҙ-үҙен уҙып китә алмай. Шулай итә белһә, ул былай ҙа үҙен шағир тип иғлан иткән икән, бүтән төрлө итеп яҙа. Әйтәйек, мин камил, тип уйлағанса, мин бер төрлө уйлайым, ә ул үҙ әҫәре камил, тип инанғаны өсөн яҙа. Шуға күрә шиғриәттә ҡалыптар һәм стандарттар юҡ. Теге йәки был шағирҙың әҫәре тик халыҡтың күңелендә генә яҡлау йәки кире ҡағыуға дусар була. Бөтә замандарҙа ла популяр һәм, М.Кәрим әйтмешләй, билдәле тип һаналып йөрөгән ижадсылар булған, әммә донъя мәҙәниәте һәм тотош кешелек критерий тип ҡабул иткән ҡиммәттәр була. Ана шул хазиналыҡ намыҫлы кешеләр тарафынан тулыландырыла. Әйтәйек, нисәмә миллиард йылдар буйы Кешелектең сәңгелдәге булған Ер өҫтөндә шедевр дәрәжәһендәге сәнғәт әҫәрҙәре бар, әммә кешелек ни өсөндөр

донъяның мөғжизәһе тип етәүҙе генә атай. Ҡем уйлап сығарған ундай критерий ҡиммәтен? Ҡешелек!

Мин бер саҡ, Лариса, һинең кеүек журналист хеҙмәтендә булғанымда, Мостай Кәримдән 70 йәше айҡанлы интервью алдым һәм шул әңгәмәнән һуң миңә ҡарата асылда һалҡынсараҡ мөнәсәбәттәге Мостай ағай, мине “Волга”һына ултыртып, үҙе рулдә ине, ҡала буйлап йөрөргә алып сығып китте. Күп нәмәләр хаҡында һөйләштек. Шунда ҡыйыулығым етеп, уға һорау бирҙем: “Мостай ағай, йәнә йөҙ йылдан һуң һеҙҙең Социалистик Хеҙмәт Геройы, Ленин премияһы лауреаты, халыҡ шағиры тигән исемдәрегеҙ онотолһа, ижадығыҙға иғтибар бөгөнгө кеүек булырмы икән?” Ундай һорауҙарға өйрәнмәгән Мостай ағай шаңҡымағандыр, ләкин уйланып барҙы. Һәм мин уның яуабын ғүмерлеккә күңелемдең түренә һалып ҡуйҙым: “Вафатымдан һуң мине, бәлки, оноторҙар ҙа, — тине ул, — әммә һин әйткән 100 йыл эсендә башҡорт халҡында ҙур шағир тыумай тормаҫ. Һәм уның тамырҙарын, ижад кимәле үҙенсәлектәрен барлағанда, минең ижадыма ла барып төртөлөрҙәр”. Шуның кеүек, беҙҙең һәммәбеҙҙе лә йә мәңгелек дан, йә мәңгелеккә инеп юғалыу көтә. Быны яҡшы аңларға кәрәк. Ә бит асылда, беҙ теләйбеҙме-юҡмы, яратабыҙмы-юҡмы, һәр замандың уй-фекер кимәлен тотоп торған шәхестәре була, сөнки яҙыусылыҡтың синонимын мин намыҫ тип билдәләр инем. Былдай намыҫ кимәлен үҙ теләге менән үҙ елкәһенә алған кешеләр бүтәндәргә маяҡ булып йәшәргә мәжбүр.

Мин бит ОТҠ, йәғни техник контроль бүлеге түгел! Әммә үҙем аңлаған, туплаған тәжрибәмә таянып, шиғриәт, һүҙ сәнғәте хаҡында фекер йөрөтә алам.

**— Бөгөн ни хәлдә әҙәбиәтебеҙ?**

— Әле беҙ 90-сы йылдар реформаларынан һуң күсеш осоронда йәшәйбеҙ. Реформалар, революциялар — сәйәси һәм социаль проблемалар ул. Әммә, кеше йәне — тотороҡло субстанция, тип әйтәбеҙ икән, халыҡтың рухи ҡиблаһы ла быуындар буйы тарих һандалдарында сүкелеп, ниндәйҙер ҡиммәттәрҙе, минең йәшәү формам, камиллыҡҡа ынтылыш юлым, тип ҡабул иткән. Ана шул тотороҡло субстанция һаман да әле беҙгә маяҡ! Ләкин бөгөнгө әҙәбиәттәге саҡ ҡына ҡибла таба алмай ыҙаланыу — үтеп китә торған күренеш. Сәбәбе билдәле — туған телгә булған мөнәсәбәттә, туған телебеҙҙең мөмкинлектәрен киң файҙаланыу даирәбеҙҙең юғала яҙып, саҡ иркенлеккә сығыуында. Үҙған йыл “Башҡортостан” гәзите республиканың Мәҙәниәт министрлығы, Яҙыусылар союзы менән берлектә районлар буйлап йөрөп, ижадҡа ынтылышлы йәштәрҙе барлап сыҡты. Уларҙың яҙғандары гәзиттә донъя күрҙе. Әлбиттә, ялтырап ҡына киткән асыштар юҡ әле, ләкин анау хәтлем эске мөмкинлектәр барлығын асыҡлау, улар һәммәһе лә яҙыусы йә шағир булып китмәһә лә, телдең, әҙәбиәттең ни рәүешле халҡыбыҙ яҙмышындағы ролен баһалар мөмкинлек бирҙе бит. Донъя мәҙәниәтендәге шиғриәткә булған мөнәсәбәт билдәләнгән.

**— Нимә ул шиғриәт?**

— Шиғриәт — юғала барған камиллыҡ хаҡындағы һағыш. Һағыш төшмәгән кеше шағир була алмай. Шағирлыҡ профессия булғас, ул ошо критерийҙы тота һәм бөттө. Һәр кемдең үҙ манараһы. Нимә генә тимәһендәр,

яҙмаһындар, кешенең мөмкинлектәре лә сикләгән ул. Шиғыр яҙырға була, элеккегә таянып, ләкин тәҡәтле хис уны тере итә.

**— Мөхәббәт нимә ул, һеҙҙеңсә?**

— Мөхәббәт тә бөтә кешегә лә тәтемәй. Мин үлеп ғашиҡ булғанымды, үҙемә үлеп ғашиҡ булған кешене белмәйем. Яратыусы ла булманы, яратҡаным да булманы. Ғашиҡ булғы ла килде, ғашиҡ булғандарын да көттөм. Ана шул тойғоларымды шиғырға һалдым. Әгәр иғтибар итһәгеҙ, бер ҡатын-ҡыҙҙың тоғро яратыуы, ир-егеттең мәртәбәле, көслө, аҡыллы, ирҙәрсә үҙ һүҙле булыуы хаҡында ижадым.

Башҡорт халҡында ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ мөнәсәбәттәре асылда, минең аңлауымса, шулайыраҡ. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары бер ваҡытта ла иренең ҡоло булмай, шул уҡ ваҡытта ашты иң тәүҙә иренә һалып бирә, балаларында ла атайға ҡарата хөрмәт тәрбиәләй, ғаиләлә ир-аттың үҙен мәртәбәле тотоуын, ғаиләһенә хужа булыуын теләй. Ошо идеалды һалдым шиғырға. Көн аша шиғыр яҙып, ғашиҡ булып йөрөмәнем. Хыялдағы идеалды һүрәтләнем.

**— Алдау нимә ул?**

— Нимә булһын инде, дөрөҫлөктө йәшереү, дөрөҫөн һөйләмәү, тигән һүҙ. Һуңғы ваҡытта, дөрөҫөн әйтһәң, кеше ышанмағанын һиҙә башланым. Ғәрләнеп китәм. Гел дөрөҫөн һөйләп йәшәһәң, хәтәр ул. Донъяны күп күрҙем, төрлө һөнәр эйәләре менән аралаштым. “Донъялыр был...” тигән иҫтәлектәр яҙып ятам. Тормошто ҡабул итеүем тураһындағы бөтә белгәндәремде лә яҙмайым. Дөрөҫөн әйтеп була, әгәр һин кешенең эске потенциалын дөрөҫ аңлаһаң.

Мөхәббәт — ул Аллаһ, тип өйрәтә христиан дине. Ләкин был ни рәүешле генә тәрән фекер булмаһын, үкенескә ҡаршы, кешеләр бер-береһен ихлас ятарырға өйрәнә алмай. Бер кеше икенсеһенең үҙенсәлеген ҡабул итә алмай. Үҙенә оҡшамағаны өсөн холҡон хөкөм итә. Былар ҙа — шиғриәттең һәм әҙәбиәттең темалары.

**— Нимәнән илайһығыҙ?**

— 42 йәшлек ир менән 32 йәшлек ҡатындың баш балаһымын. Улар һуғышты үтеп, ғаилә ҡорған. Атайым колхоз рәйесе, ферма мөдире булып эшләгән, ниндәйҙер талаптар ҙа ҡуйыр булғандыр ауыл халҡына. Шуға күрә, электр булғанға саҡлы, кәрәсин лампалы ауылда йәй көнө тыуһам да, ҡыш буйы илағанмын. Ауылда Һөйәрбикә инәй өйҙә лампа яныуын күреп, бала илауын ишетеп, йәтеш-йәтеш һиңә, Ғәниев, тип әйтеп китер булған (көлә). Илауым күңелем нескәлектәндер, тип уйлайым. Кешеләр минең холҡома ҡарап, үҙ һүҙле тип ҡабул итә. Ә бит ярайһы уҡ яҡлауһыҙ кеше ул мин. Ирһеҙ ҙә булғас, бөтөнләй кәмһетеп ташламаһындар өсөн йыш ҡына үҙемде көслө кеше итеп күрһәтеп йәшәнем. Ләкин мин әле булһа илайым. Шиғыр уҡыһам да, кино ҡараһам да. Ләкин кеше алдында түгел. Тырышам үҙемде тоторға. Күңел структураһылыр ул, күрәһең.

Бер заман башҡорт йырының аһәңенә ғашиҡ булып, уның ғәжәп моңо һәм киң октавалары тураһында уйланғанда, ни өсөн ҡайһы саҡта концерт залында ултырыусыларҙың илап ебәреүенә төшөнөргә теләп маташтым. Бәлки, бер ҡатлылыр минең һығымталарым, әммә шундай фекергә килдем: һәр бәндәнең күңел структураһы Йыһан эфирының структураһына оҡшаш. Йыһандың

эфиры хәтлем тауыш һәм моң йәнгә килеп ҡағылғанда, Йыһандың бәләкәй генә бер тамсыһы булған кеше күңеле, йәшәйештең мәңгелек түгеллеген нисәлер секунд эсендә аңлап, үҙе лә һиҙмәҫтән түгелеп китә.

**— Һуңғы арала һеҙҙе тетрәткән ваҡиға?**

— Һуңғы арала аралашып йәшәгән ҡатындар китеп барҙы. Үлем менең өсөн яңылыҡ булмаһа ла, ауыр кисерҙем. Алтмышҡа ла, етмешкә лә етмәй ер ҡуйынына инеп ятсы әле! Ошо кисерештәр мине һәр көнөмә рәхмәт әйтергә өйрәтте.

Мине бер осор әҙәби элита ҡыйырһытты кеүек. Хөкүмәтебеҙ тарафынан ижадымдың баһаланмауынан нык ҡына ғәрләнә инем. Ни өсөн ярай алманым, тип уйланым. Шул уйҙан стрестарға бирелеүҙәрем һис кәрәкмәгән кисерештәр булып күренә хәҙер. Ә бит заманында сыбыртҡының осо кеүек шайт итеп килеп тейгәйне был хәлдәр. Ғүмер барышында йәшәүҙең мәңгелек түгеллеге, аңлашылмаусылыҡтар, ерле юҡтан күрә алмауға барып етеүҙәр менән сағыштырғанда, мәғәнәһеҙлек булып күренә. Әлбиттә, йәшәү яңылыҡ булмаған кеүек, үлем дә яңылыҡ түгел, Есенин әйтмешләй.

Шулай ҙа замандаштарҙың берәм-берәм китеп барыуы эсемде бошора. Хәҙер минең ир-ат дуҫтарым да, әхирәттәрем дә кәмене. Ләкин тыуған халҡыма булған мөхәббәтем һәм инанысым артҡандан-арта бара. Кешеләрҙең бынау һумдар осһоҙлана барған саҡта ла, тормоштоң итәгенә йәбешеп ятып, бала-сағаһын уҡытырға тырышыуы, мал-тыуар аҫрап, етешлектә йәшәүе һоҡландыра. Интернетта барған осрашыуҙарҙа ҡатын-ҡыҙҙар матур-матур өҫ кейемдәре, сигеү-бәйләүҙәр менән мауығыуы, түшелдеректәр кейеүе, ғаилә, ауыл, милли байрамдар ойоштороуы — был милләттең рухи көсөнөң ни тиклем ҡаҡшамаҫ булыуы хаҡында һөйләй. Быны матур һүҙҙәр өсөн әйтмәйем. Был ысынлап та шулай. Ана, ҡарағыҙ, “Пусть говорят” тапшырыуы: ниндәй генә хәлгә төшмәй ҡайһы берәүҙәр. Берәү ҙә фәрештә түгел. Минең лозунг — намыҫ, ояла белеү, гонаһтан ҡурҡыу, мөхәббәт.

**— Кем ул халыҡ шағиры?**

— Шағирлыҡ — ул үҙе үк ҙур исем. Теге йәки был милләттең шағиры булыу — үтә яуаплы һөнәр. Ә инде Халыҡ яҙыусыһы тигән билдәләмә — ул милләттең йөҙөк ҡашы дәрәжәһендәге кеше. Халыҡ шағиры, кәм тигәндә, милләтенең яҙмышы хаҡында эпик әҫәрҙәр, поэмалар яҙған булырға тейеш. Ул поэмаларҙың хрестоматиялар дәрәжәһендә булыуы шарт. Ерем, телем, илем яҙмышы, тип публицистик мәҡәләләр яҙа белергә, халыҡ мәнфәғәтен яҡларға күкрәген киреп баҫырлыҡ хоҡуғы булырға тейеш. Халыҡ шағирының әйткән һүҙе халыҡтың бер кемендә лә протест тыуҙырмаҫҡа тейеш.

Халыҡ яҙыусыһы әлеге лә баяғы замана, ил, халыҡ яҙмышы, социаль, сәйәси, мәҙәни сфералар хаҡында һүҙ әйткән роман яҙырға тейеш. Шулай уҡ гәзит-журналдарҙа халыҡ яҙмышын яҡлап сығыштар яһаған кеше булыуы зарур. Фекерһеҙ кешенең яҙыусы булыуы хоҡуҡһыҙлыҡ кеүек күренә миңә.

Халыҡ шағиры тигән исемдең матди яғы ла арыу булырға тейеш! Әхләҡи хоҡуғы ла булырға тейеш ижадсының.

**— Тамара апай ғәрселме?..**

— Ғәрлек — кешенең һинең хаҡтағы фекерҙәренең, үҙенең һинең асылың менән тап килмәүе иҫ киткес ғәрләндерә. Үҙең ғүмерең буйы бәпләп, һыу

һибеп, башынан һыйпап үҫтергән инаныстарыңды һанламайынса инҡар итеү, шик белдереү мине рәнйетә. Һәр кеше үҙенең күңелен ғүмере буйы формалаштыра. Һәр кешенең яҡшы булғыһы килә, бирәү ҙә, насар булайым, енәйәтсе булайым, тип ғүмер итмәй, шуға күрә кешеләрҙе рәнйетмәҫкә тырышырға кәрәк.

Был, әлбиттә, бөтөнләй тәнҡит һүҙҙәре әйтергә ярамай, тигәнде аңлатмай. Әгәр һүҙ шиғриәт, милләттең иң юғары зиһен һәм күңел мөхите хаҡында бара икән, ундағы илке-һалҡылыҡҡа, эгоизмға күҙ йомоп ҡарарға ярамай. Мин әҙәбиәткә килгән осорҙа М.Ғәли, М.Кәрим, Р.Бикбай, Т.Йосопов, Ш.Бикҡол, Р.Ғарипов, К.Әхмәтйәнов, Р.Сафин кеүек әҙәбиәтебеҙгә һәм рухи донъябыҙға тоғро кешеләр беҙгә иҫ киткес талаптар ҡуйҙы, барлы-юҡлы ижадыбыҙҙы йә маҡтап, йә тәнҡитләп, әҙәбиәткә етди ҡарарға өйрәтте. Ошо кимәлдән төшөргә ярамағанлығын ғүмерлеккә һәм тәрән төшөндөм мин.

**— Йәшәүҙең мәғәнәһе?**

— Тормоштоң мәғәнәһе юҡ, әммә уны кеше аҡыл ултырғас ҡына аңлай. Шулай булыуы һәйбәт тә уның, сөнки йәшерәк ваҡытта аңлаһа, тотош донъя күптән депрессияға бирелеп, эволюциянан баш тартып, рухи һәм иҡтисади ҡыйралыштар кисерер ине. Йәшәүҙең мәғәнәһе юҡлығын аңлағас, ҡайһы бер кешеләр эсә башлай, кемдер дингә килә, өсөнсөләр рухи көсө арҡаһында эске ҡөҙрәт менән йәшәүгә ниндәйҙер мәғәнә һалып маташа. Әлбиттә, был фекерем менән килешмәүселәр күп буласаҡ, әммә был минең шәхси фекер, тип ҡабул итергә кәрәктер.

**— Аллаһ Тәғәләгә мөнәсәбәтегеҙҙе белдереп яҙған шиғырығыҙҙа "Юҡ УЛ! Юҡ! Тип беҙҙе өйрәттеләр. Шулай тиһәләр ҙә, киҫәттеләр: Намыҫ — маяҡ! Булығыҙ әҙәпле! Буйлатмағыҙ аслан нәфсегеҙҙе, Яратмағыҙ оят ғәҙәтте! Булған бит УЛ, Бар УЛ! — Тиҙәр хәҙер", — тигән юлдар бар...**

— Минең әнейем Әминә Аллабирҙе ҡыҙы Ситдиҡова Күгәрсен районының Дауыт-Ҡайып ауылынан. Ситдиҡовтар менән Арыҫланбәковтар Ишембай районының Көҙән ауылынан Дауыт-Ҡайыпҡа руханиҙар сифатында ебәрелгән. Ауыл зыяратында беҙҙең нәҫелдән сығышлы муллалар ҡәбере күп. Нәҫелебеҙ ауылда ҡыҙҙар өсөн дә, малайҙар өсөн дә мәктәп тотҡан. XX быуат башында нәҫелебеҙҙә тыуған кешеләрҙең бөтәһе лә Ҡөрьән Кәримде уҡый белгән. Шул иҫәптән минең коммунист әнейем дә. Шуға күрә Ислам дине мин тыуғандан бирле, өйөбөҙҙөң һәр төр йола-ғәҙәттәре кеүек, тәбиғи ысынбарлыҡ ине. Ҡөрьән уҡыу, ҡорбан салдырыу минең өсөн бер тәбиғи булмаған ваҡиға түгел. Шулай булырға тейеш тип үҫтем. Аҙна һайын йома көндәре өй беренсә йөрөп, хәйер таратырға миңә ҡушалар ине. Шуға күрә Аллаһы Тәғәлә менән мөнәсәбәт ҡороу серҙәрен белмәһәм дә, аңлап бөтә алмаһам да, халҡыбыҙҙың йәшәйеше булған дини йолаларыбыҙ минең өсөн ниндәйҙер асыш та, сурытып белдереп йөрөй торған ваҡиға ла түгел.

Әнейем менән атайымдың вафатынан һуң атай нигеҙендә ҡорбан салдырам, өлкәндәрҙе лә, йәштәрҙе лә йыйып алам. Әйтергә теләгән һүҙҙәремде вәғәзләйем. Һеңдерелгәнсе әйтә торғандарымды һөйләйем. "Һин ҡорбан салдыра, Ҡөрьән уҡыта башлағандан бирле был йола ауыл йәштәрендә лә

тарала бара”, — тигәндәре бар. Мин быға шатланам, сөнки Ислам диненең әҙәп, әхлаҡ ҡанундары минең йәшәү позициям булған гонаһтан ҡурҡыу, ояла белеү, кешеләрҙе яратыу тигән инаныстарыма тап килә. Дини йолаларҙың кешеләргә таяныс булыуына ышанам. Сөнки Юғары аҡылдың кешеләрҙә дини тәғлимәттәр тәрбиәләүенең иң мөҡәддәс маҡсаты — ул кешелекте бер-береһенә кешелекле булырға өйрәтеү. Урал батыр беҙгә был хаҡта борон замандарҙа уҡ әйтеп ҡалдырған!

**— Ата-әсәләр менән балаларҙың мөнәсәбәте хаҡында, моғайын, уйланғанығыҙ барҙыр? Ошо хаҡта фекер ҙә яҙып ҡуйғайнығыҙ бер мәл “Бәйләнештә”ге сәхифәгеҙгә...**

— Балалар менән ата-әсәләр мөнәсәбәте — бөтә цивилизацияларҙың, милләттәрҙең дә әҙәбиәтендә, сәнғәтендә сағылыш тапҡан, киң таралған тема ул. Иң төп конфликт балаларҙы ата-әсәләре аңламай, теләктәрен үтәмәй, тигәнгә ҡайтып ҡала. Был бөтә донъя мәҙәниәтендә шулай.

Ләкин башҡорттарҙың йолалары буйынса атай-әсәй — бала өсөн “губернатор”. Атай-әсәйгә ҡаршы һүҙ әйтеү — табу. Ғөмүмән, өлкән кеше алдында өйләнгән, ғаилә ҡараған ирҙәргә тиклем ауыҙ асып дәғүә белдерергә хоҡуҡһыҙ. Беҙҙә шулай ҡабул ителгән. Күргәнем бар ата-әсәһенә тызрайып, ҡаршы телләшкән балаларҙы. Нисек атайға һүҙ әйтеп була ул? Нисек әсәйгә тауыш күтәрәһең? Бөтә әсәй менән атай ҙа хан була алмай инде. Әммә һинән тәжрибәлерәк һәм һиңә ғүмер биргән бит әле улар. Беҙҙең әҙәбиәттә ата-әсәһенә ҡаршы сыҡҡан иҫтә ҡалырлыҡ геройҙар юҡ.

**— Һеҙ әҙәбиәт министры булһағыҙ?**

— Әҙәбиәтсегә етәксе кәрәкмәй. Әҙәби мөхит ойоштороу, яҙыусыға шарттар тыуҙырыуға булышлыҡ итеү хөрт түгел инде ул. Яҙыусы — ул профессионал. Үкенескә ҡаршы, Конституциябыҙҙағы һөнәрҙәр исемлегендә ул юҡ, пенсия, стаж, дауаханалар, ял йорттары ҡаралмаған әҙиптәргә. Яҙыусы пенсияны яҙыусылыҡтан тыш һөнәргә бил бөгөп яулап ала. Мин бер ниндәй министр ҙа булырға теләмәйем. Йөк аты, күндәм һәм еренә еткереп эштәрен башҡарыусы мин. Үҙемә тапшырылған эштәрҙе еренә еткереп башҡарҙым һәм әле лә шулай эшләйем кеүек.

**— Ижадтың кәрәге бармы? Маҡсаты ниҙә?**

— Йәшәүҙең мәғәнәһе юҡ ул, тигән фекергә килгәйнек бит әле бая. Был минең шәхси фекерем, тип тә киҫәткәйнем. Әммә ергә тыуған кеше яҡты донъянан китеү тарафына һәр секунд һайын атлап барғанда, Ер өҫтөндәге иң төп бурысы — бала ҡалдырыу. Уны тормошҡа әҙерләү процесында тик ашау-эсеү, кәйеф-сафа ҡороу менән генә ғүмер итеү юлын һайлаһа — был мәғәнәһеҙлек. Минең уйымса, йәшәүҙең иң ҡыҙыҡ яғы — донъяны танып белеү процесы. Донъяны танып белгәндә, ниндәй һөнәр эйәһе булһаң да, ижадҡа барып төкәләһең. Баҡса үҫтерһәң дә, хатта бысаҡ ҡайраһаң да, итек текһәң дә, ана шул донъяға булған ижади ҡараш йәшәүҙе мәғәнәле итә лә инде.

*Лариса АБДУЛЛИНА әңгәмәләште.*